**Башҡорт мәктәптәренең  8 класс уҡыусылары өсөн башҡорт теленән**

**дистанцион олимпиада һорауҙары**

1. Ҡайһы юлда ҡылым һүҙ төркөмөнә ҡараған һүҙҙәрҙең һорауҙары бирелгән?
   1. Кем? Кемдең? Кемгә? Кемде? Кемдә? Кемдән?
   2. Нисек? Ҡасан? Ҡайҙа? Күпме? Ни өсөн?
   3. Ни эшләй? Ни эшләгән? Ни эшләне? Ни эшләйәсәк?
   4. Нисә? Нисәү? Нисәнсе? Нисәшәр? Нисә самаһы?
   5. Ниндәй? Ҡайһылай?

2. Күләм-дәрәжә рәүештәрен табығыҙ:
   1. Яҡында, бында, алда, йәнәшәлә
   2. Шәп, рәхәт, тиҙ, ҡапыл, кинәт
   3. Элек, борон, иртән, бая, бөгөн
   4. Күп, байтаҡ, әҙ-мәҙ, өсләтә, саҡ-саҡ
   5. Юрамал, бушҡа, юҡҡа, юрый

3. Аҙһытыу дәрәжәһендәге сифаттарҙан ғына торған юлды билдәләгеҙ:
   1. Ап-аҡ, ҙурыраҡ, ҡыҙғылт, зәңгәр
   2. Йәшерәк, һарғылт, көслө, йәм-йәшел
   3. Күм-күк, матур, үтә көслө, бәләкәйерәк
   4. Алһыу, матурыраҡ, оҙонса, ҡып-ҡыҙыл
   5. Аҡһыл, йәшкелт, күкһел, зәңгәрһыу

4. **Йыуҙы – йыуманы, йыуа – йыумай, йыуасаҡ – йыумаясаҡ**. Ҡылымдың ниндәй формаларына миҫалдар бирелгән?
   1. Ҡылымдың һөйкәлеш формалары
   2. Ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ формалары
   3. Ҡылымдың йүнәлеш формалары
   4. Ҡылымдың күләм формалары
   5. Дөрөҫ яуап юҡ

5. **Шишмә <u>йырлай-йырлай</u> үҙ юлына йүгерҙе, Фәрит тә <u>ашыға-ашыға</u> еләк йыйырға тотондо** (А.Йәғәфәрованан). Был һөйләмдә аҫтына һыҙылған һүҙҙәр ҡылымдың ниндәй төркөмсәһенә ҡарай?
   1. Исем ҡылым
   2. Сифат ҡылым
   3. Хәл ҡылым
   4. Уртаҡ ҡылым
   5. 5.Дөрөҫ яуап юҡ

6. Төшөм йүнәлеше ҡылымдары бирелгән юлды билдәләгеҙ:
   1. Уҡый, яҙа, йыуа, килә, китә

2. Сабырһыҙлана, кейенә, биҙәнә, ҡысҡырына
3. Йыуыла, төҙөлә, биҙәлә, уҡыла
4. Эшләтә, яҙҙыра, көлдөрә, маҡтандыра
5. Ярҙамлаша,  эшләшә, әҙерләшә, тотоша

7. **Хат ташыусы апай бөгөн дә беҙгә <u>инмәгән</u>** һөйләмендә аҫтына һыҙылған ҡылымдың заман формаһын билдәләгеҙ:
1. Шаһитлы үткән заман
2. Шаһитһыҙ үткән заман
3. Хәҙерге заман
4. Билдәле киләсәк заман
5. Дөрөҫ яуап юҡ

8. **Үҙе шундай көслө, шул тиклем аҡыллы** һөйләмендә ҡылым ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән?
1. Эйә
2. Хәбәр
3. Аныҡлаусы
4. Тултырыусы
5. Был һөйләмдә ҡылым юҡ

9. Составында бүлеү теркәүесе булған һөйләмде билдәләгеҙ:
1. Төн яҡынлап бара, әммә колхозсылар эшкә сығырға ашыҡмайҙар әле (Б.Бикбай).
2. Улар әле береһен, әле икенсеһен бүлеп, шыбырлашып, хәбәр һөйләйҙәр (Һ.Дәүләтшина).
3. Мин дә юрый уның артынан тәгәрәгән булдым (С.Агиш).
4. Иртән дә, көндөҙ ҙә, кис тә ул үҙ урынында ҡалды (М.Кәрим).
5. Мәскәүҙә күп минең дуҫтарым, шуға күрә тыуған еремдең мин алам бары бер ус тупрағын (Р.Ниғмәти).

10. **Концерттан һуң халыҡ оҙаҡ таралышманы** һөйләмендә бәйләүестең ниндәй килештән һуң килгәнен билдәләгеҙ:
1. Төп килештән һуң
2. Эйәлек килештән һуң
3. Төбәү килештән һуң
4. Төшөм килештән һуң
5. Сығанаҡ килештән һуң

11. **Ниңә, ҡарт үҙе шаһит та баһа** (С.Агиштан) һөйләмендә киҫәксәне табып, уның төрөн билдәләгеҙ:
1. Көсәйтеү киҫәксәһе
2. Икеләнеү киҫәксәһе
3. Һорау киҫәксәһе

4. Сикләү киҫәксәһе
5. Раҫлау киҫәксәһе

12. **Әсәйем бөгөн дә ҡайтманы, <u>ахыры</u>** (Ә.Вәли) һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

1. Теркәүес
2. Бәйләүес
3. Киҫәксә
4. Ымлыҡ
5. Мөнәсәбәт һүҙ

13. Ымлыҡтар тип ниндәй һүҙҙәргә әйтәләр?

1. Предметты белдергән һүҙҙәргә
2. Кешенең хис-тойғоларын, кисерештәрен белдергән һүҙҙәргә
3. Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәргә
4. Һөйләүсенең үҙе әйткән фекергә ҡарата мөнәсәбәтен белдергән һүҙҙәргә
5. Тиң киҫәктәрҙе йә ябай һөйләмдәрҙе үҙ-ара теркәгән һүҙҙәргә

14. **Емештең йөрәге хәҙер ҡырҙа, һыу буйында, туғайҙа, шарлауыҡтар янында гиҙә** (З.Биишева) һөйләмендә ниндәй киҫәктәр тиң булып килгән?

1. Тиң эйәләр
2. Тиң хәбәрҙәр
3. Тиң аныҡлаусылар
4. Тиң тултырыусылар
5. Тиң хәлдәр

15. Һөйләмдәрҙең ҡайһыһында исем сығанаҡ килештә килгән?

1. Хәҙер был серҙе бүтән кешегә сискем дә килмәй (М.Кәрим).
2. Кеше яҙмышы ғәжәп ҡатмарлы нәмә.
3. Таң уянһа, һайрай ҡоштар, Үҙ йырынан үҙе туймай (Я. Ҡолмой).
4. Зөһрә вокзалға төшкәндә, ярты төн яҡынлашҡайны инде (Д.Исламов).
5. Кеше менән кеше асыуланышмай тормай.

16. **Көслө <u>көслөгә</u> үсле** (Мәҡәл). Аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән?

1. Эйә
2. Хәбәр
3. Тултырыусы
4. Аныҡлаусы
5. Хәл

17. **Йөҙәрләгән күҙҙәр Закирйәнгә төбәлгәйне** (Р.Низамов). Һөйләмдең аныҡлаусыһы ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?

1. Исемдән
2. Сифаттан
3. Ҡылымдан
4. Сифат ҡылымдан
5. Был һөйләмдә аныҡлаусы юҡ

18. Ҡайһы һөйләмдә күләм-дәрәжә хәле бар?

1. Төн ҡарарға сыҡтым ҡалаға (М.Кәрим).
2. Ҡыуаныстан күҙҙән йәш килә (Т.Йәнәби).
3. Беҙ кире ҡайтҡанда йәйәү ҡайттыҡ (Я.Хамматов).
4. Күп йөрөнөм, күп күрҙем, иллә-мәгәр аҙ белдем (Б.Бикбай).
5. Яуҙа ат та яҡын (Мәҡәл).

19. Бер составлы һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ: **Инде ни эшләргә? Ҡайҙа ғына башты ҡасырырға?** (З.Ураҡсин).

1. Билдәле эйәле һөйләм
2. Билдәһеҙ эйәле һөйләм
3. Эйәһеҙ һөйләм
4. Атама һөйләм
5. Был ике составлы һөйләм

20. Түбәндәге һөйләмдәрҙең ҡайһыһы ике составлы һөйләм?

1. Тел ҡылыстан да үткер (Әйтем).
2. Атты сыбыртҡы менән ҡыумайҙар (Әйтем).
3. Телеңде теҙгендә тот, этеңде сынйырҙа тот (Мәҡәл).
4. Ана Фәйзуллалар ихатаһы (З.Ғәлимов).
5. Бөгөн бик иртә торолдо.

**Башҡорт мәктәптәренең 8 класс уҡыусылары өсөн башҡорт әҙәбиәтенән**

**дистанцион олимпиада һорауҙары**

1. “Әйтеш” төшөнсәһенә билдәләмә бирегеҙ.
2. Шафиҡ Әминев-Тамъяниҙың дүрт әҫәрен атағыҙ.
3. Ғәли Ибраһимовтың “Кинйә” романы нисә китаптан тора?
4. Баязит Бикбайҙың ниндәй драма әҫәрҙәрен беләһегеҙ?
5. Баязит Бикбайҙың “Ер” поэмаһында ниндәй осор һүрәтләнә?
6. Драма төшөнсәһенең ике мәғәнәһен аңлатығыҙ.
7. Зәйнәб Биишеваның “Яҡтыға” трилогияһы китаптары нисек атала?
8. Мостай Кәрим ҡайҙа тыуған?
9. Нимә ул поэма?
10. Мостай Кәримдең поэмаларын атағыҙ.
11. “Йыртҡыс тиреһе” әҫәренең авторы кем?
12. Рәми Ғарипов ниндәй әҫәрҙәре өсөн республикабыҙҙың Салауат Юлаев премияһына лайыҡ була?
13. Ғайса Хөсәйенов ҡайҙа һәм ҡасан тыуған?
14. Ғайса Хөсәйеновтың биш китабының исемдәрен атағыҙ.
15. Талха Ғиниәтуллин ниндәй телдә ижад итә?
16. “Ҡытайгород” повесының авторы кем?
17. Хәсән Назар ниндәй китабы өсөн республикабыҙҙың Салауат Юлаев премияһына лайыҡ була?
18. Ниндәй сәсәндәрҙе беләһегеҙ?
19. Башҡорт дәүләт университетындағы “Шоңҡар” әҙәби-ижад түңәрәге ҡайһы шағирҙың ниндәй әҫәре хөрмәтенә аталған?
20. “Һуңғы тарпан” әҫәрен кем ижад иткән?